25 ОКТЯБРЬ 2023 ЙЫЛ,
ШАРШАМБЫ, № 43 (11484)

# Хәйбулла хәбәрҙәре

ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ
ГӘЗИТ 1931 ЙЫЛДЫҢ 1 НОЯБРЕНӘН СЫҒА (12+)
Беҙҙең сайт: https://haibh.ru

*Беҙҙең интервью*

# Урындағы хакимиәт башлығы булыу, тимәк, халыҡ өсөн эшләү

**Һәр биләмәнең социаль-иктисади үҫеш планы территорияны дөйөм үҫтереү мәсьәләләрен ҡарай. Улар урындағы властан даими иғтибар талап итә. Ауыл хакимиәтендә һәр миҙгелдә лә эш етерлек, айырыуса ул төҙөкләндереү мәсьәләһе беренсе планға сыҡҡанда, яҙҙан алып көҙгә тиклем күп. Әлеге мәлдә төҙөкләндереү йүнәлешендә ниндәй бурыстар хәл ителә, перспективала нимә билдәләнгән? Ауыл нисек йәшәй? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр тураһында Өфө ауыл биләмәһе башлығы Даян Кәримов менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**–Даян Насирйән улы, һеҙ етәкселек иткән Өфө ауыл биләмәһенә нисә ауыл ҡарай һәм унда күпме халыҡ йәшәй?**

–Өфө ауыл Советы – районда иң ҙур ауыл биләмәһе иҫәпләнә. Уға 8 ауыл, атап әйткәндә, Өфө, 1-се Мырҙа, Первомайский, Әлибай, Рафиҡ, Түбәнге Смаҡ, Яңы Петровка, Петропавловка ҡарай. Теркәлгән дөйөм халыҡ һаны – 2380 кеше.Өфө ауылында иһә 1200 кеше йәшәй. Ауыл биләмәһендә 1 урта мәктәп һәм уның 4 филиалы, 1 күп функциялы клуб, 5 клуб, 3 балалар баҡсаһы, 1 ауыл табип амбулаторияһы, 6 фельдшер- акушерлыҡ пункты бар. Фельдшерҙар етмәй, Өфө һәм Рафиҡ ауылдарында ғына фельдшер бар.

**–Хәл итә торған мәсьәләләр күпме?**

– Беҙҙең биләмәне үҫтереү планы урамдарҙы яҡтыртыу, төҙөкләндереү, юлдарҙы ремонтлау һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе ҡарай. Быларҙың һәммәһе лә бер көнләк эш түгел, улар даими иғтибар, иң мөһиме – планлаштырылған финанслауҙы талап итә. Ауыл биләмәһендә хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләр, башҡараһы эштәр күп. Быйыл Өфө ауылы “Айыҡ ауыл” республика конкурсының муниципаль этабында ҡатнаша. Әле уның сиктәрендә төрлө саралар уҙа.

**–Быйыл төҙөкләндереү сиктәрендә ниндәй эштәр башҡарылды?**

–Өфө ауылы паркында ағастар ултырттыҡ. “Аныҡ эштәр” проекты буйынса урамдарҙы яҡтыртыу эштәре менән шөғөлләндек. Бөтә ауылдарҙа ла урамдарҙа фонарҙарҙы алмаштырабыҙ. “Урындағы башланғыстарҙы хуплау” программаһы буйынса былтыр Түбәнге Смаҡта, быйыл иһә Өфө ауылында зыяратты кәртәләнек. Тағы ла федераль кимәлдә бүленгән финанс ярҙам менән Өфө ауылы мәктәбе ремонтланды. “Башҡорт баҡыры” йәмғиәтенең финанс ярҙамы менән мәктәптә аш-һыу блогы төҙөлдө. Тағы ла Өфө ауыл мәҙәниәт йортон ремонтлайбыҙ. Бының өсөн “Башзолото” йәмғиәте 3 миллион һум аҡса бүлде. Шулай уҡ уларҙың финанс ярҙамы менән яңы трактор алдыҡ, йылы ангар эшләнде, һыу үткәрҙек. Республика бюджетынан бүленгән аҡсаға һәм “Башҡорт баҡыры” йәмғиәтенең финанс ярҙамы менән Первомайский ауыл мәҙәниәт йорто капиталь ремонттан һуң асылды. Түбәнге Смаҡ ауылы урамына ҡырсынташ түшәнек. Тағы ла Петропавловка ауылының Есенин урамына асфальт түшәргә планлаштырылған. Йыл һайын ауыл урамдарында соҡор-саҡырҙарҙы ремонтлайбыҙ.

**–Һеҙҙә ниндәй ауыл хужалығы предприятиелары бар? Улар ауыл биләмәһе тормошонда ҡатнашамы?**

–Өфө ауылында – Марат Булатов, Артур Айҙашев, Яңы Петровкала – Илдар Низамов, Первомайскийҙа – Радик Ниғәмәтов, Рафиҡта – Айтуған Вәлиев, Петропавловкала Үлйәбаевтарҙың крәстиән-фермер хужалыҡтары уңышлы эшләй. Илдар Низамов һәм Артур Айҙашев шулай уҡ ауыл советы депутаты итеп һайланды. Фермерҙар ауыл биләмәһе тормошонда даими ҡатнаша, төҙөкләндереү эштәрендә ярҙам итәләр. Хакимиәт эшендә уларға таянабыҙ һәм бергәләп ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итәбеҙ.

**–Биләмә бюджеты нимә иҫәбенә тулылана?**

–Ғәҙәттә биләмә бюджеты һалым йыйылмаһы иҫәбенә тулылана. Шулай уҡ беҙҙең ауыл биләмәһе территорияһында тау сәнәғәте компаниялары эшмәкәрлек алып бара. Уларҙың бағымсылыҡ ярҙамы менән дә тулылана.

**–Ә бына шәхсән һеҙҙе, ауыл биләмәһе башлығын, ниндәй мәсьәләләр борсой?**

–Юлдар торошо борсой. Айырыуса ҡойма ямғырҙарҙан һуң, ҙур ҡатмарлыҡтар тыуҙыра. “Башзолото” йәмғиәтенә грейдер менән юлдарҙы рәтләргә ярҙам һораныҡ. Рафиҡ ауылы эргәһендә күпер төҙөү мәсьәләһе лә хәл ителмәгән. Сөнки хәҙер яңы күпер төҙөү бик ҡиммәткә төшә. Проект бар, кәрәкле документтар йыйылған, әммә республика бюджетынан финанс бүленмәгән әле.

**–Киләһе йылда нимәләр эшләргә планлаштыраһығыҙ?**

–Алдағы йылда мөмкинлеккә ҡарап, ауыл биләмәһе хакимиәте бинаһын ремонтларға уйлайбыҙ. 1-се Мырҙа ауылы клубы ла капиталь ремонт талап итә. Өфө ауыл паркында төҙөкләндереү эштәрен дауам итәсәкбеҙ. Өфө ауылының Аҡмулла урамына асфальт түшәргә планлаштырабыҙ. Ауыл биләмәһе юлдарына ҡырсынташ түшәргә, урамдарҙы яҡтыртыу мәсьәләһен хәл итеүҙе дауам итәбеҙ. “Урындағы башланғыстарҙы хуплау” программаһында ла ҡатнашырға иҫәп тотабыҙ. Сөнки ул ауыл биләмәһен төҙөкләндереүҙә ныҡ ярҙам итә.

**–Ғәмәлдәге ҡануниәттә нимәләрҙе үҙгәртергә тәҡдим итер инегеҙ?**

–Көтөүһеҙ йөрөгән мал-тыуар өсөн административ штраф күләме күберәк булһа, яҡшы булыр ине. Бәлки, ул саҡта ҡарауһыҙ йөрөгән мал хужалары быға яуаплы ҡарар ине. Сөнки күптәр малдарын көтөүгә ҡушмай, урамға ғына иркен сығарып ебәрә.

**–Тәнҡитләүселәргә нисек ҡарайһығыҙ?**

–Тәнҡитте тыныс ҡабул итәм, сөнки халыҡтың йылдар буйына хәл ителмәй килгән проблемалар хаҡында әйтергә хаҡы бар. Күптәр эшлекле кәңәш бирә. Ундайҙарҙың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға тырышам.

**–Халыҡҡа ниндәй теләктәрегеҙ булыр?**

–Тәү сиратта, барыһына ла һаулыҡ, именлек теләйем. Донъялар тынысланһын. Йәшәгән урындарыбыҙ матур, йәмле булһын өсөн ауылдарҙа таҙалыҡ һәм матурлыҡты бергәләп булдырайыҡ. Бөтә нимәне хөкүмәттән генә көтөргә ярамай, әҙерәк үҙебеҙгә лә әүҙем булырға кәрәк. Әгәр ҙә ауылда тормош сифатын яҡшыртыуға ҡағылышлы идеялары, эшлекле тәҡдим-кәңәштәре булһа, килһендәр, беҙ һөйләшеүгә һәр ваҡыт асыҡ.

**–Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт.**

**Рәзилә Байғусҡарова** яҙып алды.

podpiska.pochta.ru

*➢Мин - патриот*

# Хәрби водитель булам тиһәң...

## Буласаҡ һалдаттар рәтен хәрби водителдәр тулыландырасаҡ

**Рәсәй Федерацияһы Ҡораллы көстәре сафына хәрби водителдәр әҙерләү буйынса яңы уҡыу йылын асыуға арналған сара үткәрелде. ДОСААФ ойошмаһы 2010 йылдан Рәсәй армияһы өсөн хәрби водителдәр әҙерләй. Быйыл да унда руль артына ултырырға һәм яңы һөнәр үҙләштерергә теләгән 25 егеттән торған төркөм тупланды.**





Сарала район хакимиәтенең социаль, йәштәр сәйәсәте һәм спорт бүлегенең баш белгесе Илнур Мәмбәтов, “Хәрби туғанлыҡ” Бөтә Рәсәй ветерандары йәмәғәт ойошмаһының Хәйбулла районы бүлеге етәксеһе Ирғәле Байназаров, махсус хәрби операциянан яңға ҡайтҡан яугирҙар, Акъяр тау колледжы студенттары ҡатнашты. Улар курсанттарға уҡыу программаһын уңышлы үҙләштереүҙәрен һәм Рәсәй Ҡораллы көстәрендә буласаҡ хеҙмәтен лайыҡлы башҡарырға әҙерләнеүҙәрен теләне.

ДОСААФ-тың урындағы бүлексәһе рәйесе Фаил Юлдашбаев белдереүенсә, республикала бөтәһе 11 автомәктәп һәм 7 урындағы бүлексәләр булып, йыл һайын республикала меңдән ашыу курсант уҡып сыға. ДОСААФ-тың урындағы бүлексәһендә йыл һайын 25 кешене уҡытып әҙерләйбеҙ, тине.

Ойошманың төп бурысы – курсанттарҙы сифатлы уҡытыу. Бының өсөн юғары квалификациялы уҡытыусылар һәм мастерҙар коллективы тупланған. Уларҙың күбеһе ҙур хеҙмәт стажына эйә. Был эшкә ҙур өлөш индергәндәре өсөн ДОСААФ хеҙмәткәрҙәре Рәхмәт хаттары менән бүләкләнде.

Район хәрби комиссариаты Рәсәй Ҡораллы көстәренә оҙатыласаҡ егеттәрҙе ДОСААФ-тың урындағы бүлексәһендә «С» категориялы водителдәр әҙерләү буйынса төркөмгә уҡырға саҡыра. Уҡыу бушлай һәм хәрби водитель танытмаһы алыусылар армияға барғанда ғәскәр төрөн үҙҙәре һайлай ала.

**Гүзәл Бохарбаева.**

**КОММЕНТАРИЙ:**

**Салауат Юлдашбаев**, ДОСААФ-тың урындағы бүлексәһе рәйесенең урынбаҫары:

–Армияла водитель һөнәре, ғәҙәти тормошта кеүек үк, бик кәрәкле. Беҙгә йыл һайын ДОСААФ-тың төбәк бүлексәһе етәкселеге тарафынан Рәсәй Ҡораллы көстәре өсөн водителдәр, техник һөнәр водителдәре әҙерләү бурысы ҡуйыла. Армияға барасаҡ егеттәрҙең төп өлөшө беҙҙең ойошмала “С” категориялы водитель һөнәрен ала, хәрби хеҙмәт нигеҙҙәре менән таныша, физик яҡтан сыныға. Автомобиль ғәскәрҙәрендә водитель – төп фигура, ул яугирҙарҙы дислокация урынына иҫән-һау алып барып еткерергә, шул уҡ ваҡытта үҙе теләһә ниндәй минутта ҡулына ҡорал алырға әҙер булырға тейеш. Шуға ла призывҡа тиклемге әҙерлек этабында уҡ курсанттың хәрби хеҙмәттең ни тиклем ҡатмарлы булыуын аңлауы, кәрәкле күнекмәләрҙе үҙләштереүе мөһим.

*➢Аңлатабыҙ Башкортостан*

# Мәктәптә аҡса йыйырға хоҡуҡтары бармы?

**Класс менән экскурсияға барыу, тәҙрәләргә жалюзи йәки күлерға һыу һатып алыу — ғәҙәттә, ошондай маҡсаттарға аҡсаны ата-әсәләр комитеты йыя.**

Был законға ярашлы ғәмәлме? Берләшмәнең статусы ниндәй? Ата-әсәләр комитетынан сығымдар тураһында отчет талап итергә мөмкинме? Ошо һәм башҡа һорауҙарға «Роскачество» менән берлектә яуап бирәбеҙ.

**◆ Аҡсаны мотлаҡ бирергә кәрәкме?**

Ата-әсәләр комитеты ағзалары, шулай уҡ һәр бер ата-әсә өсөн бөтә иғәнәләр ирекле. Әгәр ҙә аҡса тапшырмаған өсөн балағыҙҙы оялтырға маташһалар, мәктәп директорына ялыу бирегеҙ. Әгәр был да ярҙам итмәһә, йәшәгән урынығыҙ буйынса мәғариф бүлегенә, Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығына йәки республика прокуратураһына мөрәжәғәт итегеҙ.

**◆Аҡса йыйыуҙы нисек ойоштороу яҡшыраҡ?**

Иң яҡшы ысул — яҙма рәүештә килешеү төҙөп, аҡсаны банк иҫәбенә күсереү. Бындай механизм аҡсаны нигеҙһеҙ тотоноуға ҡаршы тыуған шикте юҡҡа сығара. Аҡсаны «кулдан-кулға» бирмәгеҙ.

**◆Иғәнәләрҙең нимәгә тотонолғанын нисек белергә?**

Беренсенән, комитет ағзаларынан һорарға була. Ата-әсәләр комитеты бөтә чектарҙы һәм квитанцияларҙы күрһәтергә тейеш. Бөтә иғәнәләр банк иҫәбенә күсерелгән осраҡта, ата-әсәләр комитетына отчет биреү еңелгә төшә.

**◆Ата-әсәләр комитетының статусы ниндәй?**

«Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында»ғы 273-сө федераль закондың 26-сы статьяһына ярашлы, мәктәптә уҡыусыларҙың һәм ата-әсәләрҙең мәнфәғәттәрен яҡлаған ата-әсәләр (законлы вәкилдәр) советы булдырыла.




**◆Ата-әсәләр комитеты тотонолған аҡса тураһында отчет бирергә теләмәһә, ни эшләргә?**

Тәүҙә уларҙы яуаплылыҡ тураһында иҫкәртегеҙ. Әгәр йыйылған аҡсаның нисек тотонолоуы тураһындағы мәғлүмәт ата-әсәләр йыйылышының көн тәртибенә индерелһә, һеҙ уның нисек тотонолоуы тураһында белә аласаҡһығыҙ. Ниндәй ҙә булһа шик тыуһа, закон буйынса һеҙ полицияға мөрәжәғәт итергә хоҡуҡлы. Был да ярҙам итмәһә, судҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Башҡа ата-әсәләр менән берлектә коллектив дәғүә төҙөгөҙ.

podpiska.pochta.ru

➢*Көҙгө саҡырылыш – 2023*

# Намыҫлы хеҙмәт итегеҙ, егеттәр!

## Районның тәүге 14 призывнигы армия сафына алынды

**Быйыл районда көҙгө саҡырылышта илдең Ҡоралльы көстәр сафын районда 75 егет тулыландырасаҡ. Армия ир-егет тормошонда яңы этап та, уның өсөн етди һынау ҙа булып тора. Егеттәрҙе оҙатыу мәленә муниципаль район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов һалдаттарға лайыҡлы, намыҫлы хеҙмәт итергә, яңы оҫталыҡҡа өйрәнергә, маҡсатҡа ынтылышлы булыуҙарын һәм өйҙәренә һау-сәләмәт ҡайтыуҙарын теләне.**

«Башҡортостандан әрмегә киткән егеттәр хәрби бурысын һәр ваҡыт намыҫ һәм хөрмәт менән үтәй. Беҙ улар менән ғорурланабыҙ, әлеге призывниктар ҙа һынатмаҫ, тип ышанам. Армия яҡшы тормош мәктәбе булды һәм булып ҡала. Илде һаҡлау, һалдат булыу, ир-егеттең иң оло һәм изге бурыстарының береһе. Матур итеп хеҙмәт итеп, тыуған яҡҡа һау-сәләмәт әйләнеп ҡайтыуығыҙҙы теләйем, – тине һәм буласаҡ һалдаттарға бүләктәр тапшырҙы.

Призывниктарҙың кәйефтәре күр ине. Был улар менән әңгәмәләшкәндә лә асыҡ сағылды.

–Әбеш мәктәбендә уҡып сыҡҡас, Аҡъяр тау колледжында белем алдым. Минеңсә, йәше еткән һәр егет әрме хеҙмәтендә булырға, уның тәмен тойорға тейеш. Мин дә тиҫтерҙәрем менән бергә ил алдында бурысымды үтәп, берәй йылдан, алла бирһә, тыуған ергә әйләнеп ҡайтырмын, – тине Бәләкәй Арыҫланғол ауылынан Вәли Усманов.

Бүребай ауылынан Раян Таһиров: "Туғыҙынсы класты бөткәндән һуң, Сибай күп профилле һөнәри колледжын тамамлап, яҙ көнө ҡулыма диплом алдым. Һәм көҙгө саҡырылышҡа эләктем. Элек-электән тыуған илде һаҡлау изге бурыс һаналған. Беҙ ҙә ата-бабаларыбыҙҙың юлынан ир-егеттәрҙе ил ҡайҙа ебәрә, шунда, илебеҙ тынислығы һағында булырға тейешбеҙ. Әрем хеҙмәтенән ҡа-



(Аҙағы 4-се биттә.)

➢*Төҙөкләндереү*

# Урамдарға асфальт түшәлде

**Ауылдар эсендә лә яҡшы юлдар булыуы — халыҡтың тормош сифаты буйынса мөһим күрһәткес. Район үҙәге халҡы урамдарҙа ремонт эштәренең барыуын, ҡайһыларына асфальт йәйелеүен дә күргәндер, моғайын. Әйткәндәй, быйыл бер нисә ауылдың урамдары асфальтланды.**

«Ағымдағы йылда Аҡъяр ауылының Йәштәр, З.Биишева, Тукай, Р.Ғарипов, М.Гәрәев урамдары юлдарына тулыһынса йәки өлөшләтә асфальт түшәлде. Әлеге ваҡытта район үҙәгенең Т.Морат һәм Р.Ниғмәти урамдарында, Садовый ауылының Тау аҫты һәм Баҡса урамдарында, Юлбарыҫ ауылының А.Вәхитов урамында, Иләс ауылының З.Вәлиди урамында ошондай уҡ эштәр башҡарыла. Бынан тыш, Аҡъяр ауылының 3-сө мәктәбе янындағы автомобиль туҡталҡаһына асфальт һалыу планлаштырыла», — тигән мәғлүмәт бирҙе район хакимиәтенең архитектура, төҙөләш һәм йәшәйеште тәьмин итеү бүлеге начальнигы урынбаҫары Рөстәм Билалов.

Юлбарыҫ ауылы халҡы Абдулла Вәхитов урамына асфальт һалыныуын һөйөнөп ҡаршы алған. Бының менән Орск ҡалаһының «Строительная компания» предприятиеһы эшселәре булыша. Ә Баймаҡ ҡалаһының «Строй-Лидер» йәмғиәте Юлбарыҫ ауылында Зәки Вәлиди урамында ремонт эштәрен башҡара – был урамға ҡырсынташ түшәлә.

«Эштәрҙе ваҡытында һәм сифатлы итеп башҡарыу өсөн предприятиела бөтә шарттар ҙа бар: эшселәр етерлек, кәрәк булһа, битум, ваҡ таш миҡсерлгә етерлек итеп алып ҡуйылған, юл техникаһы паркының хәле яҡшы. Юлбарыҫ ауылында асфальт һалыуға йәмғеһе 8 эшсе һәм 10 берәмек техника йәлеп ителде. Асфальтты Орск ҡалаһынан ташыйбыҙ. Смета буйынса А.Вәхитов урамында ярты километрҙан ашыу оҙонлоҡтағы юлға асфальт түшәйбеҙ. Уның киңлеге 5 метр, ә ҡалынлығы 7 сантиметр тәшкил итә. Беҙҙең өсөн был бәләкәй объект, әммә эште еренә еткереп сифатлы башҡарырға тырышабыҙ. Бер үк ваҡытта Аҡъяр һәм Садовый ауылдары урамдарына асфальт һалыу менән мәшғүлбеҙ», – ти подрядсы предприятиеһы вәкиле Хачатур Малхасян.

Ауыл юлдарына асфальт һалғас, халыҡ өсөн тағы бер проблема тыуа: транспорт саралары ҙур тиҙлек менән йөрөй башлай. Ә был кешеләргә, бигерәк тә балаларға хәүеф тыуҙыра. «Машина йә мотоцикл йөрөтөүселәр ауыл урамдарында ҙур тиҙлек менән йөрөмәһендәр ине. Именлек йөҙөнән, уларҙың юлда йөрөү ҡағиҙәләрен ҡәтғи үтәүҙәрен һорайым», – тип мөрәжәғәт итте Һамар ауыл биләмәһе башлығы Рафаэль Кәримов.



Юлбарыҫ ауылының А.Вәхитов урамына асфальт һалынды

Шул уҡ ваҡытта Юлбарыҫ ауылы халҡы билдәләүенсә, урамдарҙы тоташтырған соҡор-саҡырлы тыҡрыҡтарҙы төҙөкләндереү, шулай уҡ Й.Исәнбаев урамына илткән Аҡташ шишмәһе аша күперҙе ремонтлау мәсьәләһен хәл итеү көнүҙәк булып ҡала.



Эйе, юл мәсьәләһе – халыҡты иң ныҡ борсоған проблемаларҙың береһе. Шуныһы ҡыуаныслы, ил һәм республика ҡаҙналарынан бүленгән аҡса ярҙамында йыл һайын, аҡрынлап булһа ла, бер нисә километр арағa асфальт түшәү мөмкинлеге бар, соҡорҙарҙы ямау эштәре башҡарыла. Киләсәктә лә был юҫыҡта төҙөкләндереү эштәре туҡтамаҫ тип ышанабыҙ.

**Раян Атанбаев.**

podpiska.pochta.ru

➢*Мәғариф*

# Салауат тоҡомо сигенә белмәй

## 1-се Аҡъяр мәктәбенең йәш шайморатовсылары ант бирҙе

**1-се Аҡъяр мәктәбендә Шайморатовсылар класын асыу тантанаһы уҙҙы. Унда 5-се класс уҡыусылары генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов исемен йөрөтөү хоҡуғына эйә булды.**



Шайморатовсылар өсҡө кейемдәре менән әллә ҡайҙан айырылып тора, бишенсегә генә барыуҙарына ҡарамаҫтан, бар әҙерлектең әһәмиәтен һиҙеп, тантана башланғанын хәрбиҙәрсә етди баҫып көтөп тора ине улар. Сараға килгән ата-әсәләр, уҡыусылар Шайморатовсыларға һоҡланып ҡарап сара урынына үтте.

Шайморатовсы класында шөғөлләнеү уларға яңылыҡ булып тора, шулай уҡ уларҙың хәрби йүнәлеш буйынса өҫтәмә шөғөлләнеүҙәре, строй-ҙа йөрөү, спорт йәһәтенән үсешеү һәм, әлбиттә, уҡыу яғынан әүҙем буласаҡтары билдәле.

Мөһим сараға килгән ҡунаҡтар балаларҙы ошондай ваҡиға менән ҡотлап, уларҙы тәртипле булырға, яҡшы уҡырға, тиҫтерҙәренә өлгө күрһәтергә, мәктәп һәм районның йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы. Муниципаль район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов бишенселәрҙе тәбрикләп: “Районда иҫәбе буйынса икенсе шайморатовсылар класы асыла, республикала иһә 178 Шайморатовсылар класы бар. Был «Шайморатов кластары»нда 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы кавалеристарының батырлыҡтары миҫалында, илдең тарихына ихтирам, патриотизм, тыуған ил, республика өсөн ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләүгә, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр формалаштырыуға, әүҙем гражданлыҡ позицияһын үҫтереүгә булышлыҡ итеүгә йүнәлтелгән системалы эш һәм ул бик кәрәкле. Ата-бабаларыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында тыуған илебеҙ өсөн көрәшкән кеүек, бөгөнгө көндә лә батыр ир-егеттәребеҙ нацизмға ҡаршы көрәш алып бара. Ҡәҙерле балалар, легендар шәхес генерал Шайморатовты һеҙ белергә тейешһегеҙ. Ул ябай, уҡымышлы кеше булған. Һеҙ ҙә илебеҙҙең данлыҡлы шәхестәре булып үҫерһегеҙ һәм был «Шайморатов кластар»ында беҙҙең республиканың киләсәге тәрбиәләнер, тип ышанам. Шайморатовсылар алға!", – тине ул. Шулай уҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар ҙа уҡыусыларға тик изге теләктәрен еткерҙе.

Уҡыусылар иһә “Шайморатовсы” исемен лайыҡлы йөрөтөргә, Башҡортостанға һәм Рәсәйгә тоғро булырға, Тыуған ил өсөн һәләк булыусылар исеменә тап төшөрмәскә, тыуған еребеҙҙең тоғро улдары һәм ҡыҙҙары булырға, төплө белем алырға, илебеҙгә намыҫлы хеҙмәт итергә, һәр ваҡытта “Салауат тоҡомо сигенә белмәй!” шайморатовсы девизына тоғро булырға ант бирҙе. Ата-әсәләр балаларының шайморатовсы исеменә ант биреүен берсә ҡыуанып, берсә ғорурланып тыңланы, ҡул сапты.

1-се Аҡъяр мәктәбенең йәш шайморатовсылары тарихи ваҡиғаның беренсе битен асты. Улар был битте асыуҙы ғына булып ҡалмайынса, киләһе йылдарҙа физаҡәр хеҙмәте менән уны дауам итеүсе лә булырҙар тип ышанайыҡ. Әйткәндәй, Хәйбулла районында беренсе «Шайморатов» класы үткән йыл башында Бүребай ауылы мәктәбендә барлыҡҡа килгән ине.

**Луиза Юлмөхәмәтова.**

**КОММЕНТАРИЙ:**



**Зарина Мөхәмәтова**, Аҡъяр ауылы:

–Беҙҙең класс шайморатовсылар класына әүерелеүенә бик шатмын. Сөнки миңә беренсенән, өс кейемем бик оҡшай, икенсенән, кластан тыш строевой һәм башҡа әҙерлек менән шөғөлләнәбеҙ. Үҙемә айырыуса рус теле, математика, биология фәндәре оҡшай. Киләсәктә ниндәй һөнәр һайлауымды аныҡ ҡына әйтә алмаһам да, республикабыҙҙың лайыҡлы гражданы булырмын, тип уйлайым.



**Раяз Нәҙерғолов,** Аҡъяр ауылы:

–Бөгөн беҙ строй менән атланыҡ, Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһы гимндарын йырланыҡ һәм Шайморатов девизына тоғро булырға ант бирҙек. Миңә матур сара бик оҡшаны. Артабан да уҡытыусыларыбыҙ, мәктәбебеҙ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй, тырышып уҡырбыҙ, тәртипле булырбыҙ, үҙебеҙгә оҡшаған һөнәргә уҡып, кәрәкле кешеләр булырбыҙ, тип ышанам. Үҙем иһә киләсәктә табип булырға хыялланам.

# Намыҫлы хеҙмәт итегеҙ, егеттәр!

**(Аҙағы. Башы 3-сө биттә.)**

сырға ярамай тип иҫәпләйем, – тип үҙ фекере менән бүлеште. Был көндә оҙатыусылар ҙа бихисап булды. Юлбарыҫ ауылынан Гөлнара Вәхитова: “Ғаиләлә ике бала – бер ул һәм бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерҙек. Бөгөн улыбыҙ Байморатты әрме сафына оҙатты. Ҡулына повестка алғас, бөтәбеҙ ҙә ир-егет ил алдындағы бурысын үтәргә, ҡасып ҡалмаҫҡа тейеш тип ҡабул иттек. Ул элек-электән килгән изге бурыс һанала. Беҙҙең ауылдан уның менән Айгиз Йәнтүрин алынды. Уларҙы бөтә ауыл менән матур итеп оҙаттыҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар советы, ағинәйҙәр улар өсөн матур итеп сара ойоштороҙолар. Беҙгә доғаларыбыҙҙы уҡып, уларҙың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын көтөргә генә ҡала. Ҡайҙа йөрөһәләр ҙә, юлдарында Хыҙыр Ильяс юлдаш булһын, – тип изге теләктәрен еткерҙе.

Үҙ сиратыбыҙҙа, егеттәргә, намыҫлы хеҙмәт итеп, яҡындары янына иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләйбеҙ.

**Луиза Юлмөхәмәтова.**

**КОММЕНТАРИЙ:**

**Гөлназ Һағынбаева, Аҡъяр үҙәк район дауаханаһы баш табибының урынбаҫары:**

–План буйынса көҙгө кампанияла райондан 75, әлеге октябрь айында 16 егетте әрме хеҙмәтенә ебәреү ҡаралған. Буласаҡ һалдаттар медкомиссия үтте. Тәүге категорияға башлыса һаулығы буйынса яраҡлы, иң сәләмәт һәм көслө егеттәр эләгә. Элекке йылдар менән сағыштырғанда, хәҙер егеттәрҙә яҫы табанлылыҡ, сколиоз, гипертония кеүек ауырыуҙар күбәйҙе. Сөнки хәҙер балалар спорт менән аҙ шөғөлләнә, физкультура дәресенән ҡасыу яғын ҡарайҙар. Шулай уҡ күҙ менән яфаланыусылар бихисап. Хәҙер электроника заманы, улар компьютер, телефон артында йыш ултыра. Был, әлбиттә, уларҙың һаулығына кире йоғонто яһай. Әрме сафына оҙатылған егеттәрҙең барыһына ла хеҙмәттәрен тултырып, тыуған яҡтарына иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләйем.

➢*Район һулышы*

## Генератор, бысҡы, газ баллондары, горелка...




Бензин генераторҙар, бысҡыс, рабица, изолон, көрәктәр, газ баллондары, горелка—66 000 һумлыҡ дөйөм суммаға йыйылған барлыҡ ошо кәрәкле әйберҙәрҙе Өфө ауыл биләмәһе халҡы махсус хәрби операция зонаһына оҙатты. Яугирҙар ихтыяжына иғлан ителгән ярҙам сараһына улар беренселәрҙән булып ҡушылды. Дөйөм алғанда, хәйбуллалар СВО башланғандан алып, ҙур әүҙемлек күрһәтә.

## Яңы техника



Ойошма-предприятиелар етәкселәре менән аҙна һайын үткәрелгән кәңәшмәлә район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов "Аквасервис" предприятиеһы етәксеһенә яңы МАЗ йөк машинаһының асҡысын тапшырҙы. Уның етәксеһе Руслан Абдуллин белдереүенсә, был техника юлдарға ҡырсынташ түшәүҙә һәм урамдарҙы ҡарҙан таҙартыуҙа ҡулланыласаҡ.

## Районда ярҙам фонды эшләй башланы



Районда социаль координатор эш башланы. Уның эшмәкәрлеге СВО ветерандарының һәм һәләк булған (үлгән) СВО яугирҙарының ғаилә ағзаларын хәстәрләүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса ойошторолдо.

Социаль координаторҙарға ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә. Улар СВО ветерандарына һәм уларҙың яҡындарына льготалар менән файҙаланыу, төрлө хоҡуки һәм көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеү, психологик һәм башҡа төрлө социаль ярҙам күрһәтә.

Хәйбулла районында социаль координатор –Лилиә Рафаил ҡыҙы Бүкәнбаева. Адресы: Аҡъяр ауылы, Муса Гәрәев урамы, 40 (икенсе ҡат). Телефон: 89177748293.

## Махсус тур ойошторолдо




Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың сираттағы бер төркөм яҡындары Баймаҡ районы Манһар ауылына юлланды. Район хакимиәте ярҙамында булдырылған был махсус тур өсөнсө тапҡыр ойошторола.

Быйыл ғына яугир яҡташтарыбыҙҙың әсәләре Бөрйән районында урынлашҡан Шүлгәнташ мәмерйәһендә ике тапҡыр булып ҡайтҡайны. Был юлы тур маршрутына бөйөк дин әһеле, әүлиә Мөжәүир хәҙрәттең ҡәберенә зыярат ҡылыу ниәтләнде. Билдәле булыуынса, был изге ерҙән халыҡ ағымы өҙөлмәй. Мөжәүир хәҙрәттең рухына аят бағышларға, шифалы шишмә һыуынан ауыҙ итергә теләүселәр күп.

## 4 мең төп ҡарағай ултыртылды



Хәйбулла урмансылығы һәм Үҫәргән участка урмансылығы биләмәләрендә урмандарҙы һаҡлауға йүнәлтелгән акция үтте. Барлығы 4000 төп ҡарағай үсентеләре ултыртылды. Өмәлә урмансылар һәм Әбеш ауыл Советы халҡынан торған 20-нән ашыу кеше ҡатнашты.

## Юлбарыҫтар ситтә ҡалмай



Юлбарыҫ ауылы халҡы СВО-ла ҡатнашҡан яугирҙар өсөн маскировкалау селтәрҙәре үрә. Селтәр үреү эше ҡатмарлы түгел, әммә көс һәм ваҡыт талап итә. Бынан тыш, улар һалдаттар өсөн йылы әйберҙәр ҙә бәйләйҙәр. "Беҙ әҙерләгән посылкалар һәм һаҡланыу селтәрҙәрен алғанда, яугирҙар беҙҙең хәстәрлегебеҙҙе лә тойор тип ышанабыҙ", – тиҙәр юлбарыҫтар.

**М.Ғәлиева** әҙерләне.

➢*Илһөйәрлек*

# Юлбарыҫтар бергәләп әрмегә оҙатты

**Юлбарыҫ ауылында «Айыҡ ауыл» республика конкурсының район этабы сиктәрендә буласаҡ һалдаттарҙы әрмегә оҙатыу кисәһе ойошторолдо. Тиҙҙән ошо ауыл егеттәре Байморат Вәхитов һәм Айгиз Йәнтүрин хәрби хеҙмәт итеү частарына юлланасаҡ.**

Был борондан килгән йола, әммә әлеге ваҡытта егеттәрҙе армияға оҙатыу сак ҡына икенсерәк төҫ алды, ата-әсәнең дә, башҡа ауылдаштарҙың да йөҙөндә хафа күберәк сағыла. Ҡәҙерләп, ел-ямғырҙан һаҡлап үҫтергән балаларын бөгөнгө заманда әрмегә ебәрергә ҡурҡҡан ата-әсәләрҙе аңларға мөмкин. Шулай ҙа, бәләкәйҙән патриотик тәрбиә алып, спорт менән шөғөлләнеп үҫкән егеттәрҙе бер ниндәй ҡаршылыҡтар ҙа ҡурҡытмай, улар Ватанды һаҡлауҙы ил алдындағы төп бурысы тип һанай. Тап уларға тыныслыҡ һаҡлауҙы ышанып тапшырырға мөмкин дә инде. Хеҙмәт итеү осоронда егеттәр етди һынау уҙып, тормош тәжрибәһе туплап, физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да ныҒынып ҡайта.

Йыр-моңдар менән оҙатылған сара барышында Һамар ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Рафаэль Кәримов, район Советы депутаты Урал Таймасов, ауылдың ветерандар советы етәксеһе Фәриҙә Таймасова, ҡатын-ҡыҙҙар советы етәксеһе Лилиә Таймасова буласаҡ һалдаттарға йылы һүҙҙәр әйтеп, иң изге теләктәрен еткерҙе. Тәүге уҡытыусылары Рәйлә Байғужина уҡыу йылдарын иҫкә алды һәм элекке уҡыусыларына теләктәр яҙылған өсмөйөшлө хаттар тапшырҙы. Афған һуғышы ветераны, ауыл имамы Хәсән Таймасов та егеттәргә өгөт-нәсихәттәр әйтеп, изге фатиха бирҙе. «Ағинәйҙәр» ойошмаһы ағзалары буласаҡ һалдаттарға аҡ юл теләп, аҡ һөт эсерҙе һәм икмәк ҡаптырып, тешләнгән һыныҡ икмәкте кулъяулыҡҡа төрөп, ата-әсәләренә тапшырҙы. Йола буйынса ул өйҙә һаҡлана, ҡатып та бөтә, тик хужаһының иҫән-һау йөрөп ҡайтырын, тағы ла бер тешләр мәлен көтөп ята бирә ул. Сараға йыйылған ауылдаштар аҡса йыйып, әрмегә барасаҡ егеттәргә тапшырҙы. Аҙаҡтан һүҙ ата-әсәләргә һәм буласаҡ һалдаттарға бирелде. Оҙатыу кисәһе төрлө ризыҡтарҙан һығылып торған өҫтәл артында сәй эсеү менән тамамланды.

Байморат менән Айгиздең Ватан алдындағы бурыстарын намыҫ менән атҡарып, тыуған яғына иҫән-имен әйләнеп ҡайтыуын теләйбеҙ!

**Раян Атанбаев.**




**ФЕКЕРҘӘР:**

**Байморат Вәхитов:**

–Әрмегә барыуҙы хуплайым, үҙем дә ил алдындағы бурысымды үтәгем килә. Армия егеттәрҙең ҙур тормошҡа аяҡ баҫыуының беренсе этабы тип уйлайым. Быйыл Аҡъяр тау колледжын тамамланым. Үҙемдә хәрби хеҙмәткә әҙермен, тип уйлайым.

**Айгиз Йәнтүрин:**

–Ниндәй ғәскәргә эләкһәм дә тырышып хеҙмәт итәсәкмен. Ауырлыҡтар осрамаҫ тигән өмөттәмен. Сибай күп профилле колледжын тамамланым. Һәр егетҡә Ватаныбыҙ алдында хәрби бурысты үтәргә кәрәк тип иҫәпләйем. Буласаҡ һалдаттарға еңел хеҙмәт теләйем.

➢*Һаҡ булығыҙ*

# Хәйбуллалар мутлашыусыларға 8 миллион һум күсергән

**Мутлашыу – бөгөнгө көндә киң таралған милек енәйәттәренең береһе. Ҡеҫә телефонына «Яҡынығыҙ аварияға осраны, тиҙ арала аҡса кәрәк» тип шылтыратыу йәки пенсионерҙарға «собес»тан килеп иҫке аҡса купюраларын яңыға алмаштырыу осраҡтары – бындай енәйәт схемалары инде һәр кемгә билдәле. Әммә еңел табыш эҙләүселәр бер урында тапанмай, алдашыуҙың яңы ысулдарын эҙләп таба. Мәкерле уйҙарын тормошҡа ашырыу өсөн улар заман технологиялары – интернет, социаль селтәрҙәрҙе, мессенджерҙар ҙа ҡуллана.**

Замана бурҙарына кешенең банк картаһынан аҡса урлау бер ни тормай. Енәйәтселәр картаның реквизиттарын, кешенең исем-шәрифен һәм ПИН-кодты белһә, аҡсаға юл асыла.

Йыл башынан алып республикала дистанцион мутлашыу күләме өсләтә артҡан. Интернет – ике башлы таяҡ. Бер яҡтан ул коммуникацияны еңеләйтә, икенсе яҡтан, уның ярҙамында яуыз ниәтле әҙәмдәр һанаулы ғына минуттар эсендә һеҙҙең янсығығыҙҙы "таҙартыуы" мөмкин.

Башҡортостандың Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2023 йылда республикала мутлашыу осраҡтарының һиҙелерлек артыуы билдәләнә: һигеҙ ай эсендә 12 меңдән ашыу осраҡ теркәлгән. Һуңғы 3 айҙа алданыусыларҙың 57-һе мәғариф учреждениелары, 41-е һаулыҡ һаҡлау системаһы хеҙмәткәрҙәре, 714-е пенсионер һәм шулай уҡ, даими килем сығанағы булмаған кешеләр һәм уҙмәшғүлдәр.

–2023 йылдың 8 айына анализ күрһәтеүенсә, Хәйбулла районында йәшәүсе 26 кеше мутлашыусылар ҡорбаны булған. Шуларҙың ҡайһылары телефон, интернет аша алданғандар. Бәғзеләрен кредит алырға өгөтләгәндәр. Һөҙөмтәлә, ағымдағы йылда хәйбуллалар аферистарға 8 миллион һум аҡса күсергән.

Шул иҫәптән, бер граждандың вкладтар буйынса инвестициялар һылтауы менән енәйәтселәр 5 миллион һумдан ашыу аҡсаһын сәлдергән. Билдәһеҙ кешеләрҙең енәйәти ҡылыҡтары арҡаһында был граждандарға ҙур ғына күләмдә матди зыян килтерелгән.

Бындай енәйәттәр тураһында даими иҫкәртеп тороуҙарға ҡарамаҫтан, граждандар һаман мутлашыусылар тоҙағына эләгеүен дауам итә. Бында төп сәбәп – беҙҙең халыҡтың эскерһеҙ, бер ҡатлы, тиҙ ышаныусан булыуы. Бының менән мутлашыусылар оҫта файҙалана. Йәнә күптәр бындай енәйәттәрҙең нисек ҡылынғанын, енәйәтселәрҙең нисек еңел генә файҙа алыуҙарын белеп бөтмәй.

Мутлашыусыларҙың ҡармағына нисек эләкмәҫкә? Әгәр һеҙгә билдәһеҙ кешеләр шылтыратып, туғандарығыҙҙың йәки таныштарығыҙҙың бәләгә тарыуы тураһында хәбәр итһә, мотлаҡ был туғандарығыҙға шылтыратып, хәлдәрен белегеҙ. Аҡса һалыр алдынан интернет селтәрҙәре аша аҡса һораған таныштарығыҙға ла шылтыратып белешегеҙ. Картағыҙ юғалһа йәки уны урлаһалар, банкка шылтыратығыҙ һәм картағыҙҙы блокка ҡуйыуҙарын һорағыҙ. Таныш булмаған сайттарҙан интернет аша тауар һатып алмағыҙ. Шулай уҡ, үҙегеҙ белмәгән сайттарҙан приложениелар, уйындар күсереп алмағыҙ, – тине Рәсәй Эске эштәр министрлығының Хәйбулла районы буйынса бүлегенең енәйәт эштәре бүлексәһе начальнигы урынбаҫары Руслан Аблаев.

Полиция хеҙмәткәрҙәре граждандарҙы таныш булмаған кешеләрҙең, шул иҫәптән кредит ойошмалары һәм көс структуралары хеҙмәткәрҙәренең телефон аша талаптары буйынса аҡса күсермәҫкә саҡыра. Әгәр телефон аша һөйләшеүҙә һеҙгә банк иҫәбе менән бәйле проблемалар тураһында хәбәр итһәләр, аралашыуҙы тамамлап, яҡындағы банк бүлексәһенә йәки полицияға мөрәжәғәт итегеҙ.

**Гүзәл Бохарбаева.**

podpiska.pochta.ru

2023 ПЕДАГОГ ҺӘМ ОСТАЗ ЙЫЛЫ

# Район мәғарифы тарихында яҡты эҙ ҡалдырҙы

## Вәсилә Ғилман ҡыҙы Сынбулатованың тыуыуына – 100 йыл

**Ҡәҙерле өләсәйем, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы Вәсилә Ғилман ҡыҙы 1923 йылдың 26 октябрендә Әбүбәкер ауылында Ғилман Айса улы һәм Шәрифә Сабирйән ҡыҙы Сынбулатовтарҙың ишле ғаиләһендә донъяға килә. Сынбулатовтар (йывандар араһы) – ғилемгә, аң-белемгә ынтылыусан зат: атаһының бер туған ағаһы Уйылдан Усман улы (1886-1971) төплө дини белем алып, Әбүбәкер ауылында биш йыл, күрше ауылда биш йыл балаларға белем бирә; уртансы ағаһы Усман Айса улы (1888-1961) муллалыҡтан баш тартып, оҙаҡ йылдар Әбүбәкер мәктәбендә башланғыс кластарҙа уҡыта. Уйылдан һәм Усман Сынбулатовтар икеһе лә Ҡарғалы мәҙрәсәһендә уҡыған. Белемгә ынтылыштары бик көслө булған: Йәнтеш ауылы аша Ҡарғалы бистәһенә йәйәү йөрөй торған булғандар. Уйылдан Айса улы шиғыр, мөнәжәттәр ҙә ижад иткән.**



**РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы, алдынғы уҡытыусы, Хәйбулла районы мәғарифы тарихында яҡты эҙен ҡалдырыусы Вәсилә Ғилман ҡыҙы Сынбулатованың тыуыуына быйыл 100 йыл тулды. Уның хаҡындағы яҡты хәтирәләр уҡыусылары, коллегалары, балалары һәм ейән-ейәнсәрҙәре күңелендә ҡәҙерләп һаҡлана.**

Вәсилә Ғилман ҡыҙының әсәһе яклап та тамырҙары затлы: өләсәһе Хөмәйрә данлыҡлы Иҫәнғол майор Ҡәйепов токомонан. Хөмәйрә Дәүләткирәй ҡыҙы тураһында данлыҡлы “Мәмбәт шәжәрәһе”ндә әйтеп үтелә [1; 83]: ул 1921 йылда ваба ауырыуынан вафат була. Ҡартатаһы Сабирйән Аккускаров – Акъяр ауылы шәжәрәһен төҙөгән уҡымышлы, мәғлүмәтле кеше. Әйткәндәй, был шәжәрә әлеге көндә лә Хәйбулла районының тарих һәм крайҙы өйрәнеү музейында һаҡлана.

1930 йылда Ғилман һәм Шәрифә Сынбулатовтар район үҙәге Акъяр ауылына күсенә. Ғаилә башлығы район советында ат караусы булып эшләй, ҡатыны балалар тәрбиәләй. Ете бала араһында һөйкөмлө, хәбәрсел, зирәк булып үсеп килгән Вәсиләне ата-әсәһе үҙҙәре менән ҡунаҡтарға, туйҙарға алып йөрөй. Тыуған ауылы Әбүбәкергә, ике туған апаһы Сәғиҙәнең туйына барғандарын, баксала апаһының әхирәттәре:

*Ал бәйләп ҡулыма,*
*Гөл бәйләп ҡулыма,*
*Йөрөйөк шыма баҫып,* – тип йырлап, төрлө төҫтәге яулыктарҙы, бер ҙур бәйләм итеп, уңға-һулға сайкап бейегәндәрен, аҙаҡ ошо бейеүҙе һеңле-ҡустыларына өйрәткәнен хәтерләй ине. Шул осорҙарҙа Әбүбәкер ауылында үткән Октябрь байрамы демонстрацияһын, йәштәрҙең йырлап уҙыуҙарын да һөйләгәйне. Аҙаҡ мин был эпизодты Әхмәт Лотфуллиндың “Ауылда байрам. 30-сы йылдар” картинаһы буйынса инша яҙғанда файҙаландым.

1930 йылда Аҡъяр мәктәбенә беренсе класка уҡырға бара. “Уҡыуға ынтылышым көслө булды. Өй башында дәрестәрҙе ҡабатлайым. Сөнки өй тулы ваҡ балалар. Ҡарттар мәсеттән ҡайта. Уларға тауышым ишетелә, үҙем күренмәйем бит инде. Аптырашып үтеп китәләр. Атайым: “Ошо ҡыҙымдан кеше сығыр”, – тип, айырыуса ярата ине мине.

1 май демонстрацияға әҙерләнәбеҙ. Күк блузка кәрәк булды. Былдай төҫтәге әйбер тапмағас, аҡҡа күк төшкән тауар һатып алып, уны күккә буяп, блузка тегеп бирҙе әсәйем.

Аҡъяр урта мәктәбенең алдынғы уҡыусыларының береһе, мәктәп активы ағзаһы Вәсилә Ғилман ҡыҙының йәшлеге дәһшәтле йылдарға тура килә: 1941 йылда Аҡъяр урта мәктәбенең IX класын тамамлағанда Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Мәктәп тупһаһынан тура фронтка оҙатылған класташ егеттәрен күрмәй ҙә ҡала улар. Класташ ҡыҙҙары Рәхимә Нураева, Зәйтүнә Юлдашбаева, Хәлимә Бактыбаева, Мәлика Богдановалар менән бергә өләсәйем дә һуғышка барырға теләк белдерә. Әхирәттәре яу яланына оҙатыла. Өләсәйемде район мәғариф бүлеге Ибраһим (Ботороз) ауылына уҡытыусы итеп тәғәйенләй. Фронтка киткән Х. Мөхәмәтовтың урынына балаларға белем бирә ул.

Ул заманда уҡытыусыларҙы йыш күсереп йөрөткәндәр: һуғыш тамамланған ваҡыт Мәмбәт мәктәбендә уҡытҡан осорона тура килә. 1945-1946 уҡыу йылын йәш ҡыҙ Әбүбәкер ете йыллыҡ мәктәбенең 1-3-сө кластар уҡытыусыһы сифатында ҡаршылай.

Был ваҡытка инде махсус профессиональ белем алған, Темәс педагогия училищеһын ситтән тороп тамамлап, “Башланғыс кластар уҡытыусыһы” квалификацияһына эйә булған педагогты район үҙәгенән алыҫта, тауҙар араһында урынлашҡан “Таналыҡ” совхозының 14 өйлө, бәләкәй генә Әҙел ауылына уҡытыусы итеп ебәрәләр. Унда барғас, тәҙрәләре лә булмаған ташландыҡ өйҙө күрһәтәләр. Мәктәпкә тип тәғәйенләнгән был бәләкәй бинаны тәртипкә килтерергә, тәҙрәләр уйҙырырға, ремонт эштәрен башҡарырға, урамды, ихатаны баҫып алған әремдән таҙартырға тура килә уға.

Йәш уҡытыусы яңы уҡыу йылын ауыл балалары менән яңынан тергеҙелгән мәктәптә башлап ебәрә. Утынын хәстәрләй, ауыл йәштәре менән берлектә төрлө кисәләр ойоштора. Мәктәптең бәләкәй булыуы, балаларға төплө белем биреү өсөн шарттарҙың етешмәүе Вәсилә Сынбулатоваға тынғы бирмәй. Ата-әсәләр менән кәңәшләшеп, яңы бина төҙөү тураһындағы мәсьәләне совхоз, район етәкселәре алдына ҡуйып, саман кирбестән 18 метрлыҡ яңы мәктәп һалдырыуға өлгәшә.

Яңы бинаға күскәс, Вәсилә Ғилман ҡыҙы мәктәп тирәләй баҡса ултыртырға була. Уҡыусыларҙан көн дә Таналыҡ йылғаһынан һыу ташытып, ауыл уртаһында торған мәктәпте матур баҡса менән урата. Унда Липецк өлкәһенән махсус заказ менән алдырылған төрлө емеш ағастары ултыртыла. Балаларҙың көсө менән 200 төптән ашыу алма, крыжовник, ҡарағат, ҡурай еләге һәм башҡа үсентеләр тәрбиәләп үстерелә. Шулай уҡ икенсе өлкәләрҙә үҫә торған үсемлектәр менән дә тәжрибә эштәре алып барыла.

Ауыл советы депутаты булараҡ, Әҙел ауылы халҡы өсөн 5 һәм 4,5 метр тәрәнлектәге ике ҡоҙоҡ ҡаҙҙырта. Бөгөнгә көндә лә ауыл кешеләре ошо ҡоҙоҡтан һыу ала. Ошо урында Сыңғыҙ Айытматовтың «Тәүге уҡытыусы» повесынан түбәндәге юлдарҙы миҫалға килтереп үтеү урынлы булыр ине: «Мин тирәктәрҙең шаулауын тыңлайым, ә йөрәгем шатлыктан да, ҡурҡыуҙан да шашып тибергә тотона. Был өҙлөкһөҙ шау эсендә алыҫ-алыҫ яҡтарҙы күҙ алдына килтерергә тырышам. Тик мин ул саҡта бер нәмә хаҡында – был ағастарҙы кем ултыртыуы тураһында ғына уйламағанмын. Ул билдәһеҙ кеше ағас үсентеләрен ергә ултыртҡанда ни хакта хыялланған, нимә тип әйткән, уларҙы бында, түбә өҫтөндә, ниндәй өмөт менән үҫтергән икән?». Ҡоҙоҡтар менән ауыл халҡының әлегәсә файҙаланыуы, «һыуы татлы» тип яратып эсеүе, яңы төшкән йәш килендәрҙе тәү башлап ошонда һыу юлы башлатыуы өләсәйемдең яҡты рухына аят һымаҡ. Хәҙерге ауыл йәштәре бик белеп бөтмәһә лә, өлкән быуын кешеләре өләсәйемдең оло хеҙмәтен ихтирам менән иҫләй.

Әҙел башланғыс мәктәбенә өләсәйем 20 йыл етәкселек итә. Вәсилә Ғилман ҡыҙының балаларҙы уҡытыуҙағы, тәрбиәләүҙәге хеҙмәте юғары баһаланып, “РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы” тигән мактаулы исем бирелә. 1967 йылда ғаиләһе менән тыуған ауылы Әбүбәкергә ҡайтып, мөғәллимлек эшен дауам итә. 39 йыл мәғариф өлкәһендә эшләү дәүерендә “Хеҙмәт ветераны” миҙалы, бихисап Почет грамоталары, мактау ҡағыҙҙары менән бүләкләнде. 1979 йылда хаҡлы ялға сыкты.

Өләсәйемдең уҡыусылары тормошта үҙ урынын, бәхетен тапкан. Уҡытыусылар, лайыҡлы етәкселәр, танылған малсылар, механизаторҙар бар араларында. Мәҫәлән, Йофар Шәрифулла ҡыҙы Кәлимуллина – Башҡортостандың атҡаҙанған малсыһы, Ленин ордены кавалеры, Фуат Сәләх улы Ҡәйепов – Башҡортостандың атҡаҙанған механизаторы. Тормошта юғары уңыштарға өлгәшкән уҡыусылары Таңһылыу Мәмбәтова, Фәниә Яҡшығолова, Салауат Рысембәтов, Йомағужа Ҡарабаев, Венера Байрамғолова, Ғәзиз Исмәғилев, Дамир Йәрмөхәмәтов, Нурый, Рәмзәнә, Гүзәл Байрамғоловтар, хеҙмәт алдынғылары булып танылған Хәбилә, Ғүмәр Ҡотоевтар һәм башҡалар менән ул лайыҡлы ғорурлана ине.

Әсәйем, Гүзәл Ғүмерҙаҡ ҡыҙы ла әсәһенең тынғыһыҙ һөнәрен һайлап, Әбүбәкер урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡытты. Хәҙер хаҡлы ялда.

Өләсәйем 5 йәшлек сағымда ҡатырғаға үҙе йәбештереп эшләгән кисмә хәрефтәрҙән һүҙҙәр теҙҙереп, уҡырға өйрәтте мине. Беҙ мәктәптә Дауыт Юлтый ижадын өйрәнә башлағас, яҙыусының “Әпәш” поэмаһынан (1934) Әпәш образының прототибын күреп белеүе тураһында һөйләгәне иҫтә.

Уҙған быуаттың 50-се йылдар аҙағында Әҙел ауылына яҙыусы Ғәйнан Әмириҙең йәйәүләп килеп сыкканы, “Таштуғай” драматик легендаһына материал йыйып йөрөгәне, аҙаҡ Таштуғай ауылына юл тотоуы тураһында ла мәғлүмәт бирҙе ул.

Бәләкәс күңелемә изгелек орлоктары һалыусы, башҡорт халыҡ ижадына, башҡорт әҙәбиәтенә һөйөү уятыусы ла булды өләсәйем Вәсилә Ғилман ҡыҙы.

**Гөлнур Ҡаскынова,**
филология фәндәре кандидаты.

podpiska.pochta.ru